*Мирас ИҘЕЛБАЕВ*

# XIX—XX быуат сәсәндәре

XIX быуат сәсәндәренең ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлеге, үҙҙәренән алдағы осорҙарҙағы ”ҡәләмдәштәре” менән сағыштырғанда, һүрелә төшә. Уларҙың халыҡ массалары менән аралашыу мөмкинлектәре юҡҡа сыға.

Башҡортостандағы XVIII быуаттан һуңғы тарихи шарттар сәсәндәрҙең ижтимағи-сәйәси ролен ҡыҫырыҡлауға килтерә. Рәсәйҙә феодаль-крепостной системаның тарҡалып, капиталистик мөнәсәбәттәрҙең үҫеүе Башҡортостанды колонизациялауҙы артабан көсәйтеүгә йоғонто яһай. 1798 йылда кантонлыҡ системаһы индереү маҡсаттарының береһе — ”башҡорт ерен аҙаҡҡаса ”тынысландырыу”, халыҡ массаларының актив антифеодаль сығыштарына юл ҡуймау” хәстәрлеге ине (История Башкортостана с древнейших времен до 60-х годов XIX в. — Уфа: Китап, 1996. — 342-се бит). Кантонлыҡ системаһына эйәреп, башҡорттарҙы артабан бөлгөнлөккә төшөрөүгә, уларҙың рухын һындырыуға йүнәлтелгән бүтән саралар йәнләнә, Рәсәй үҙәгенән күпләп башҡа халыҡтар күсерелә, башҡорт ерҙәре аяуһыҙ талана, социаль тигеҙһеҙлек көсәйә. Воронеж, Рязань, Курск, Тамбов, Смоленск, Тула, Орел, Пенза, Сембер, Ҡазан яҡтарынан һәм Украинанан көсләп күсерелгән йә үҙҙәре теләп килгән крәҫтиәндәр халыҡтың тығыҙлығын арттыра, милли составын үҙгәртә. 1800—1850 йылдар эсендә генә Ырымбур губернаһына ситтән 694 мең кеше күсеп ултыра (шунда уҡ, 341-се бит). Ерҙәр дворяндар тарафынан юҡ ҡына хаҡҡа һатып йә булмаһа ыҙан һалыу ваҡытында бушҡа тартып алына. Кантонлыҡ системаһын индереү Башҡортостанда административ-территориаль бүленештең электән йәшәп килгән ырыу принцибын боҙа, башҡорттарҙың үҙидараһы ҡалдыҡтарын тулыһынса юҡҡа сығара, башҡорттар менән мишәрҙәргә үҙҙәре йәшәгән урындарҙан ситкә сығып йөрөү, башҡорттарҙың традицион байрам йыйындары тыйыла. Был хаҡтағы рәсми ҡарарҙы губерна идаралығы 1831 йылдың 21 ноябрендә кантон начальниктарына еткерә (шунда уҡ, 345-се бит). Ундай мәкерле сара, үҙенең күҙгә бәрелеп торған кире һөҙөмтәләренән тыш, һиҙелмәҫтән генә халыҡтың рухи үҫешенең төрлө тармаҡтарын тотҡарлай. Йыйындарҙы тыйыу, тимәк, ҙур күләмле сараларҙы ойоштороу, массаларҙы етәкләү, улар алдында сығыш яһау (ораторлыҡ) һәләтлектәре сәнғәттең төрлө тармаҡтары — йыр-бейеү, нәфис һүҙ, әйтергә кәрәк, хатта театр үҫешенә лә кире йоғонто яһай. Халыҡта күмәк уйындарға бәйле театр элементтары бик күптән йәшәп килгән. Ә ”ике актерлы театр” хаҡында һөйләп тораһы ла юҡ. Софокл өсөнсө актерҙы индергәнгә тиклем антик сәнғәттең ике актерлы театры ла бит асылда әйтеш рәүешендә булған. Әлеге сара сәсәндәрҙең ижади мөмкинлеген сикләй, аудиторияһын тартып ала. XIX быуат

сәсәндәре репертуарындағы жанрҙарҙың кинәт ҡыҫҡарыуы барыһынан элек ошо сәбәптәргә бәйле. Элек бөтә Башҡортостанды, күрше илдәрҙе бер итеп гиҙгән, халыҡ диңгеҙе эсендә балыҡтай йөҙгән һүҙ оҫталарының XIX быуатта рәсми ҡағыҙһыҙ үҙ йорттарынан күрше ауылға сығырға ла хоҡуғы булмай. Рөхсәтһеҙ сыға икән — эҙәрлекләнә, ҡасҡын яҙмышына дусар итеlә, тотолһа — язалана, Себергә һөрөлә. Әммә шуныһы ғәжәп — XIX быуат сәсәндәре үҙҙәренең ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлеген бөтөнләй үк тарайтмай, XVI—XVIII быуаттарҙа йәшәп килгән ауыҙ-тел әҙәбиәте жанрҙарының береһен дә тәләфләмәй, бары тик эскәрәк йәшерә. Йыйын кеүек күмәк тыңлаусыны талап иткән әйтеш, ҡобайырҙар хәҙер инде халыҡҡа сығарылыуын сығарылмай, әммә сәсәндәр телендә, халыҡ хәтерендә йәшәүенән туҡтамай. Эпостың бығаса йәшәү формаһы кеүек үк, сәсәндәр үҙҙәренең элекке остаздарының әйтеш, ҡобайырҙарын үҙ репертуарҙарында һаҡлай, форсаты тыуғанда халыҡҡа, киләһе быуын һүҙ оҫталарына еткереү юлдарын ҡарай. Күрәһең, йыйындар ҙа тулыһынса туҡталып ҡалмаған; төпкөл урындараҡ, бигүк шау-шыу ҡуптармай, аҙыраҡ һанлы ҡатнашыусылар менән булһа ла, үткәрелеп торған. Быны С.Г.Рыбаков яҙмаларынан да күрергә мөмкин. Ул XIX быуат аҙағында 3-сө Бөрйән волосының Миндеғол һәм Кейекбай ауылдары йыйынына шаһит була: ”Күрше Кейекбай ауылынан йырсылар, улар менән күп кенә бейеүселәр, көрәшселәр, тамаша күрергә теләүселәр килде...” Артабан ғалим йырсылар, бейеүселәр, көрәшселәр бәйгеһен тасуирлай (Рыбаков С.Г. Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта. — СПб, 1897. — 257—258-се биттәр). Тау-урман яҡтары башҡорттары йәйге оҙон көндәрҙе ҡырҙағы эш менән үткәргәндән һуң, бергәләп күңел асыу өсөн киске ял ваҡытын да файҙаланғандар: ”...бер аҙ һуңыраҡ көрәш йә уйындар башлана, йә үләндән эшләнгән һыҙғыртҡыстың — ҡурайҙың моңло тауыштары, уға ҡушылып, әкрен, үҙенсәлекле шиғриәтле йыр башлана, ҡайһы саҡта бейеүҙәр ойошторола” (шунда уҡ, 24-се бит). Шулай ҙа бәләкәйерәк аудиторияларҙа, ҡыҫыҡ шарттарҙа ҡобайыр менән әйтештең ”тыны тарыҡҡан”. Әйтер һүҙҙе киңерәк даирәгә таратыу өсөн йыр ҡулайлыраҡ һаналған. Адресатҡа уны мотлаҡ халыҡ йыйылған урындарҙа ғына түгел, телдән-телгә, ”почта аша” ла еткереп булған. Эпос, әйтеш, ҡобайыр киләһе быуындарға сәсәндәр теле аша ғына күсһә, йырҙы ябай халыҡ та эләктереп ала алған. Өҫтәүенә, XIX быуат сәсәндәренең халыҡҡа әйтер һүҙенең пафосы ла үҙгәрә төшкән. Әйтеш, ҡобайырҙарҙа Ватан яҙмышы, изге яу, азатлыҡ кеүек оло мәсьәләләрҙе бөтә илгә һөрән һалып күтәреп сығып булһа, йырҙарҙа ошо уҡ мәсьәләләр авторҙың һәм тыңлаусының күңел донъяһына, шәхси кисерештәренә бәйләп бирелгән.

Йыр, шулай итеп, әйтеш менән ҡобайырҙың тәғәйенләнешен, хатта ниндәйҙер кимәлдә художество үҙенсәлектәрен — социаль-ижтимағи йөкмәткеһен, агитацион йүнәлешен, йәмғиәт һәм тәбиғәт закондарын йәнәш ҡуйып һүрәтләп, фәлсәфәүи мәғәнәгә эйә булыу ҡанундарын үҙенә ала. Дөрөҫ, әйтеш менән ҡобайырҙың ялҡынлы публицистик пафосы йырҙа эске лиризм менән, ә бер мотивҡа көйләп һөйләү алымы, йыр йөкмәткеһенә бәйле рәүештә, күп төрлө, ҡабатланмаҫ моң менән алмашына. Сәсәндәр йыры авторҙарҙың үҙҙәренең генә түгел, моңға һәләтле бүтән кешеләрҙең дә башҡарыуына, телдән-телгә таралыуына иҫәпләнгән, шуға күрә

йәшерен мәғәнәле телмәрҙән, шартлы, символлы һүҙҙәрҙән арына төшә. Әммә халыҡ араһында киң таралыуы һәм йөкмәткеһенең, форма яһаусы сараларының ябайлашыуы уны тиҙ фольклорлашыуға килтергән. Алда күрербеҙ, авторлығы Буранбайға һәм Ишмөхәмәткә ҡайтарып ҡалдырылған йырҙар күптән инде халыҡ ижады репертуарына күскән.

## Буранбай-Йәркәй

Яңы дәүер ауыҙ-тел әҙәбиәтенең мәшһүр йыр оҫтаһы Буранбай-Йәркәй сәсән (Буранбай Ҡотдосов) булған. Ул яҡынса XVIII быуаттың аҙаҡҡы сирегендә хәҙерге Баймаҡ районының Буранбай (Кинйәбулат) ауылында тыуған. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Төрки һәм рус яҙмаһын яҡшы белгән. 1815 йылда йорт старшинаһы итеп тәғәйенләнә. Әммә 1820 йылда уға ялған бәлә яғып, дәрәжәһен һәм вазифаһын тартып алып, каторгаға хөкөм итәләр. Себергә оҙатҡанда юлда ҡасып ҡотола, ике йыл буйы башҡорт, ҡаҙаҡ ерҙәрендә ҡасып йөрөй, 1822 йылда тотоп, ҡабат Себергә ебәрәләр. Артабанғы яҙмышы аныҡ билдәле түгел. Тағы ҡасып, Урал һәм Волга араһындағы ерҙәрҙә йәшеренеп йөрөүе бик ихтимал. Уның авторлығына ҡайтарып ҡалдырылған йырҙар, йөкмәткеләренә ҡарағанда, каторгала һәм унан ҡасҡандан һуң сығарылғанға оҡшаған. Буранбайҙың үлгән йылы ла асыҡланмаған; 1868 йылда, дуҫы Ҡаһарман кантон донъя ҡуйған саҡта, ул әле иҫән булған. Тимәк, ярайһы уҡ оҙон (быуат самаһы) ғүмер кисергән. Хакимдарҙың "ғәҙел хөкөмөнә" эләкмәҫ өсөн Ялан Йәркәй, Хажиғәле, Шаһибәрәк тигән исемдәр менән йөрөгән. ("Шаһибәрәк" йырында шундай юлдар ҙа бар: "Ҡартайғанда үҙемә исем ҡуштым, Шаһибәрәк тиеп йырларға". — Башҡорт халыҡ ижады: Йырҙар. Беренсе китап. — Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1974. — 114-се бит). Тәүге тапҡыр XIX быуат аҙағында С.Г.Рыбаков тарафынан яҙып алынған "Буранбай" йыры башҡорт йыр классикаһының алтын фондына ингән. Уның менән аҙаҡ яҙыусы А.Роом, музыка белгестәре И.В.Салтыков, Л.Н.Лебединский, А.С.Ключаревтар ҡыҙыҡһынған. Шулай уҡ Буранбайҙыҡы тип фараз ителгән "Тәфтиләү" йыры Л.Фон-Бергхольдтың иғтибарын ылыҡтырған (Бергхольд Л. Горные башкиры-катайцы // Этнографическое обозрение, 1983, № 3—4. — 84-се бит). Буранбай исеменә бәйле йырҙарҙың тематикаһы уның үҙенән алдағы сәсәндәрҙең тормош маҡсаттарына, ижад принциптарына тоғро икәнлеген раҫлай. Тыуған иленән мәжбүри айырылған кеше үҙенең яралы яҙмышы хаҡында күберәк йырларға тейеш ине һымаҡ. Ә Буранбайҙы беренсе сиратта илдең тарихи үткәне ("Тәфтиләү"), заманының мөһим ваҡиғалары ("Һыр"), ярлы-ябағаның тормошо, өмөт-хыялдары ҡыҙыҡһындыра; әлбиттә, үҙ биографияһындағы айырым факттарға һәм мөхәббәт темаһына ла ҡағылмай үтмәй. "Тәфтиләү"ҙә XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Башҡортостанда булып үткән фажиғәле ваҡиғалар ҡуҙғатыла, 1736—1738 йылдарҙағы башҡорт ихтилалын баҫтырып, тиҫтәләрсә башҡорт ауылдарын яндырған А.В.Тевкелевтың эштәре ҡәһәрләнә:

Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта.

Был йырҙағы кисеү образы иғтибарҙы йәлеп итә. Буранбай XIV—XVIII быуаттар йырауҙары, сәсәндәре ҡулланған традицион образды тап уларса мәғәнәлә уйната: Башҡортостан еренә үтеп, ниндәйҙер гонаһ ҡылған кеше, кире ҡайтыр юлында кисеүҙән (ҡылыстан үткер, ҡылдан нәҙек сират күперенән) сыҡҡанда язаһын алырға тейеш. Ерәнсәнең Абулхайыр ханға мөрәжәғәтендәге ҡәбер ташы һалынған кисеүҙе иҫкә төшөрәйек. Бында ла Тевкелев ишеләр өсөн йылға аша сығыр юл ябыҡ:

Ҡайнап ҡына сыҡҡан Иҙел аша
Тәфтиләүҙәр кисеү таба алмаҫ.

"Һыр" 1839 йылда Ырымбур губернаторы В.А.Перовскийҙың Аҡмәсеткә (Ҡыҙыл Урҙаға) ойошторған походына арнала, сөнки уның ғәскәренең төп көсөн башҡорттар тәшкил итә:

Бары беҙҙең генә башҡорттар шул
Күҙ терәгән әрме көстәре.

Күп иркәйҙәр шунда ятып ҡалды
Ҡайта алмайса ҡаты яуҙарҙан.

"Ҡаһарман кантон" йырында, 1865 йылда Башҡортостанда кантонлыҡ системаһы бөтөрөлгәс, үҙенең мундиры, ҡылысы менән тиҙ генә хушлашырға теләмәгән элекке кантон начальнигының ҡыҙғаныс та, көлкөлө лә торошо күҙ алдына баҫтырыла. Был әҫәргә социаль йөкмәтке һалынмаған. Заманында Ҡаһарман кантон француз һуғышында ҡатнашҡан, "өс-дүрт миҙал" алып ҡайтҡан. Автор уның шәхси тормошон яҡшы белә, хәлен дә, күрәһең, һәйбәт аңлай, "штатский" ҡалыуының ғаиләһенә, һөйгәне Шәһиҙә менән мөнәсәбәтенә йоғонто яһауын күреп, шуны юморға әйләндерә. Бында Буранбайҙың ижади талант киңлеге тағы ла тулыраҡ асыла. Сағыштырып ҡарайыҡ: бер яҡ ҡотобонда социаль йөкмәткеле, ауыл ирҙәрен йөрәкһетер мәшһүр "Буранбай", икенсе яғында шаян "Ҡаһарман кантон".

Хеҙмәтсән халыҡтың ауыр көнкүреше, боласыл характерлы ҡасҡындар яҙмышы "Шаһибәрәк", "Хажиғәле", "Иркутск" йырҙарында сәсәндең шәхси кисерештәре менән тығыҙ үрелеп бирелә:

Нахаҡ эштәр менән юялар икән
Арыҫлан кеүек ирҙең баштарын.

"Сәлимәкәй" йырын иһә ҡатын-ҡыҙҙың илаһи матурлығына гимн тип атап булыр ине. Буранбай исеменә бәйле бәйет тә һаҡланған. Ул иһә сәсәндең үҙ яҙмышына күберәк ҡағыла — шундай йөкмәткеле йырҙары менән ауаздаш.

Әйткәнебеҙсә, XIV—XVIII быуаттарҙағы һүҙ оҫталарының репертуарын йыйыу, һаҡлау, киләһе быуындарға еткереү эше менән махсус шөғөлләнеү шулай уҡ Буранбайҙан башлана.

## Ишмөхәмәт сәсән

Буранбай Ҡотдосовты үҙ заманында Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаев (Мырҙаҡай Балапанов) яҡшы белгән. Сығышы менән ул хәҙерге Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылынан; хәлле, уҡымышлы ҡатламға ҡарай. Атаһы Балапан Матисов старшина булған. 1834 йылғы ревизия мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Ишмөхәмәт үҙе лә йорт старшинаһы вазифаһын биләгән, зауряд-хорунжий дәрәжәһенә эйә булған. 1839—1840 йылдарҙа Хиваға яһаған походында Ырымбурҙың юғарыла телгә алынған генерал-губернаторы Перовский атаҡлы йырсы-импровизатор, ҡурайсы Ишмөхәмәтте һәр саҡ үҙенең янында тотҡан, оҫталығы һәм яуҙарҙағы шәхси батырлығы өсөн алтын менән биҙәлгән ҡылыс бүләк иткән.

Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев авторлығына бәйле йырҙар төп проблематикаһы менән Буранбай сәсән йырҙарына ауаздаш. Ҡасҡынлыҡты үҙе татымаһа ла, ундай яҙмышлы ир-егеттәрҙең хәленә битараф ҡалмаған (”Юлтый ҡараҡ”, ”Малыбай”). Мырҙаҡаев ижадының ҡайһы бер айырмалы яҡтарын ғына күрһәтеп үтәйек. ”Айүкә”, ”Саңлы үҙәк”, ”Томан” йырҙарында, мәҫәлән, ”боласыл” кәйеф урынына, Ишмөхәмәттең тормош тураһындағы тыныс, фәлсәфәүи уйланыуҙары күберәк урын биләй. Тыуған яҡтың тәбиғәт гүзәллеген тасуирлап, уның күренештәрен йәмғиәт ысынбарлығы менән йәнәш ҡуйып, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте, үткән ғүмер, йәшәү мәғәнәһе хаҡында фекер йөрөтә.

Саңлы үҙәккәй, һиндә бесән саптым,
Сапҡан ерем күбә булһын тип.
Саңлы үҙәккәй, һиндә йыр йырланым,
Дуҫ-ишемдең күңеле булһын тип.

Айүкә лә тауҙа бер сағыл бар,
Әллә генә ямғыр, әллә ҡар.
Үткән дә генә ғүмер үтеп китте,
Алдағы көндәремдә ниҙәр бар?

Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев халҡыбыҙҙың рухи байлығына — ауыҙ-тел-дәгеһенә лә, яҙмалағыһына ла — үтә һаҡсыл ҡараған. Тарихи документтарҙы, шәжәрәләрҙе, кантонлыҡ идараһының эш ҡағыҙҙарын йыйып, ҡәҙерләп һаҡлаған. Хатта үткән дәүерҙәр батырҙарының уҡ-һаҙаҡтарын да йыйып ҡуйған. Осороноң арҙаҡлы сәсәндәре менән аралашҡан: ”Байыҡ” йырын авторҙың үҙенең башҡарыуында тыңлау бәхетенә ирешкән, Буранбай Ҡотдосов менән ете йыл буйы тығыҙ бәйләнештә торған, Ғәҙебәк Насир менән бергә Хива походында ҡатнашҡан, ә Ғәбит сәсәндең иң яҡын остазы булған.

## Ғәбит сәсән

Атаҡлы йырсы һәм ҡурайсы Ғәбит сәсән Арғынбаев (1856—1921) ҙур күләмле фольклор һәм ауыҙ-тел эпик ҡомартҡыларын башҡарыу-

сы булараҡ күберәк билдәле. Ул хәҙерге Баймаҡ районының Иҙрис ауылында тыуып үҫкән. 1912 йылда Ватан һуғышының 100 йыллығына арнап, Ырымбур ҡалаһында үткәрелгән ҡурайсылар бәйгеһендә һәм шул уҡ йылда Ырымбур губернаһының Яҡшымбәт ауылында (хәҙерге Көйөргәҙе районына ҡарай) башҡорт халыҡ йырҙарын һәм ҡобайырҙарын башҡарыусылар ярышында беренсе урындарҙы ала. 1920 йылда Башҡортостан хөкүмәте тарафынан Стәрлетамаҡта ойошторолған ҡурайсы-сәсәндәр конкурсында шулай уҡ еңеп сыға.

Ғәбит сәсән бер нисәшәр мең юллыҡ текстарҙы яттан һөйләй алған. Билдәле булыуынса, 1907—1920 йылдарҙа М.Буранғолов унан ”Урал батыр”, ”Иҙел менән Яйыҡ”, ”Аҡбуҙат”, ”Күсәк бей”, ”Тамъян”, ”Батырша”, ”Юлай менән Салауат” эпостарын, бик күп ҡобайырҙар, йырҙар, легенда-риүәйәттәр яҙып ала. ”Ул һөйләгәндә үҙен-үҙе онота, күҙҙәре ерҙә көлә, илар ерҙә илай, әҫәрләнеп тора, — тип хәтерләй М.Буранғолов. — Уртала туҡтап ҡалып, бүленһә, шул ерҙән ялғап алып китә алмай, яңынан башлай” (Буранғолов М. Сәсән аманаты. — Өфө: Китап, 1995. — 102-се бит). Сөнки, Ғәбит сәсән үҙе әйтеүенсә, һөйләгәндә эпос, ҡобайыр геройҙары араһында йәшәй: ”Мин донъяны онотам, ул кешене күҙ алдыма килтерәм дә үҙемде шул кешеләр менән бергә хис итәм. Улар менән бергә яуҙа булам. Ҡобайыр ҡайҙа илтһә, мин шунда” (шунда уҡ, 102-се бит). 1910 йылда унан ”Урал батыр” эпосын яҙып алғас, М.Буранғолов, ниндәй мәшһүр ҡомартҡыға юлыҡҡанын аңлаптыр инде, ҡыуанысынан үҙенең атын бүләк итеп китә (Баһуманов А. ”Урал батыр” һәм батыр сәсәндәр // Башҡортостан, 2000, 11 февраль).

Буранбайҙан һәм Ишмөхәмәттән айырмалы рәүештә, Ғәбит сәсән, күрәһең, үҙе йырҙар сығармаған. Юғиһә, халыҡ аңында уның авторлығы онотолмаҫ, ә йырҙары, бәлки, фольклорлашып та өлгөрмәҫ ине; ни тиһәң дә, яҙып алыу, өйрәнеү башланған дәүерҙә йәшәгән. Һуңғы йылдарҙа уның исеменә бәйле бер нисә шиғри текст табылды. ”Ҡурай”, ”Һалдат”, ”Һаҡмар”, ”Һаҡалым”, ”Аусы мажараһы” (”Һимеҙ ҡуян”) тип исемләнгән шул текстарҙан сығып ҡарағанда, сәсән шиғыр техникаһын һәйбәт белгән, ә поэтик ижад менән етди шөғөлләнмәгән, мөһим мәсьәләләр ҡуҙғатмаған, мәрәкә өсөн генә ҡулына ҡағыҙ-ҡәләм алған икәнлеге күренеп тора. (Сөләймәнов Ә., Мамлеева Г. Тарих алдында оло бурыслыбыҙ // Шоңҡар, 2000, № 3, 69—71-се биттәр).

XIX быуатта ауыҙ-тел ижадсыларының төрлө кимәлдәгеләре күп булған. Уларҙың ҡайһы берҙәренең исемдәре ҡасандыр үҙҙәре сығарған, ә бөгөн инде халыҡ ижадында ныҡлап урын алған йырҙарҙың атамаларында һаҡланып ҡалған. Сығарыусыһының исемен йөрөткән йырҙарҙың күбеһе — боласыл тәбиғәтле ҡасҡындарға ҡағылышлы (”Бәхтейәр”, ”Бейеш батыр”, ”Шәрәфетдин”, ”Юркә Юныс”, ”Ғәҙебәк Насир”, ”Заһидулла”, ”Ғүмәров”, ”Сәйетхужа”, ”Сәләй”, ”Йосоп егет”, ”Тимерйән”, ”Шафиҡ”, ”Зәйнулла” һ.б.). Унан ҡала — социаль тигеҙһеҙлек, тормош-көнкүреш (”Ишмырҙа”, ”Тимербай йыры”), егет даны (”Бәҙиғөл”, ”Аманов йыры”), әрме хеҙмәте (”Нуриман һалдат йырҙары”, ”Имәнғол”, ”Ғайса”), мөхәббәт (”Айтуған йырҙары”, ”Хәлимә йыры”, ”Илсебай көйө”) циклдарында ла осрай. Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙ яҙмышына, кантон башлыҡтарына, түрәләргә ҡағылышлылары ла күп кенә.

Әммә күпселек йырҙарҙы исемдәре теркәлгән кешеләр үҙҙәре түгел, ә бүтән авторҙар сығарған. Нисек кенә булмаһын, һәүәҫкәр ижадсылар йырҙарға XIX быуат тормошоноң күп яҡлы проблемаларын һыйҙырырға тырышҡан, профессиональ һүҙ сәнғәтенә үҙҙәренең араһынан үрҙә һүҙ алып барылған өс арҙаҡлы сәсәнде вәкил иткән. Был өсәү үҙ дәүеренең ысын мәғәнәһендәге ауыҙ-тел һүҙ оҫтаһы сифаттарын төрлө яҡлап аса: халыҡ мәнфәғәттәрен ҡайғыртып, ғәҙеллек яҡлап, "ышаныслыҙлығы" өсөн эҙәрләнгән боласы; хәрби етәкселәрҙең кәңәшсеһе, янында йөрөүсеһе, яугир тәбиғәтле шәхес; халыҡ тарихын, ырыуҙар шәжәрәһен һаҡлаусы, өйрәнеүсе белгес; импровизатор, йырсы, ҡурайсы; фольклор йыйып таратыусы, оҫта итеп башҡарыусы талант эйәһе.

XX быуатта, айырыуса совет осоронда, уҡый-яҙа белгән ҡатламдың күбәйеүе ауыҙ-тел ижадсыларын да үҙҙәренең әҫәрҙәрен әкренләп яҙма рәүештә сығара башлауына килтерә. XIX быуат аҙағынан алып ауыҙ-тел һәм яҙма әҙәбиәт араһы бик нык яҡыная. Салауаттан башланып, бер аҙ туҡтап ҡалған был процесс, асылда, яңынан ҡуҙғалып, йылдам хәрәкәт ала. Ауыҙ-тел әҙәбиәте вәкилдәре үҙҙәренең ижад емешен ҡағыҙҙа күргеһе килә, баҫтырыу хәстәрлеген күрә. Ә яҙма әҙәбиәттә инде күбәйә төшкән шағирҙар, киреһенсә, классик ауыҙ-тел дәүеренең арҙаҡлы сәсәндәренә оҡшарға тырышыптыр, күрәһең, туранан-тура халыҡ алдында импровизациялау менән мауыға (М.Аҡмулла, М.Өмөтбаев, Ш.Әминев, Ш.Бабич һ.б.); әммә ике төркөмдөң дә әйтер һүҙен уҡыусыға еткерер төп юл матбуғат биттәренә килеп терәлә. XX быуат башынан ауыҙ-тел ижадсылары репертуарында йыр ҙа инде һүлпәнләнә төшә. Баҫылған әйберҙәрҙең үҙҙәрен авторҙар йә XIX быуат аҙағы — XX быуат башының грамоталы һәүәҫкәрҙәре араһында "модаға ингән" жанрға ҡыҙығып, "бәйет" тип йөрөтәләр, йә яҙма әҙәбиәттәге жанрҙар исемдәре менән атайҙар (шиғыр, мәҫәл һ.б.). Әлбиттә, ауыҙ-тел әҙәбиәтенең йыр, ҡобайыр, әйтеше лә бөтөнләй үк онотолмай.

XX быуат ауыҙ-тел ижадсылары араһынан "Башҡортостандың халыҡ сәсәне" исеме бирелгәндәренә бер аҙ туҡталып үтәйек.

## Фәррәх Дәүләтшин
## (1887—1956)

Бөрө районы Иҫке Уртай ауылында тыуған. Йәшләй етем ҡалып, хәлле ауылдаштарының малын көтөп йән аҫрай. Урал заводтарында эшләй. 1916 йылда фабрикала шартлау һөҙөмтәһендә күҙҙән яҙа. Тыуған яҡтарына ҡайтып, бәйеттәр, шиғырҙар, йырҙар сығара башлай. Халыҡ араһында "сәсән" исеме менән таныла. "Һүҙ табыусы һуҡыр Фәррәх әңгәмәләре" (1928), "Орденлы халыҡ йырсыһы Фәррәх йырҙары һәм бәйеттәре" (1939), "Сәсәндең кәңәштәре" (1949), "Сәсән тауышы" (1967) тигән китаптар сығара. Уларҙа совет индустрияһы алдынғыларын, нефтселәр хеҙмәтен, осоусылар ҡаһарманлыҡтарын, ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәре ҡаҙаныштарын данлай; ватандаштарын тағы ла тырышыбыраҡ эшләргә саҡыра, "халыҡ дошмандарын", Көнбайыш "һуғыш суҡмарҙарын" фашлай, уларҙың уҫал ниәттәрен "белеп тора".

## Сәйет Исмәғилев
(1888—1970)

Шишмә районының Йәрми ауылынан. Ул да йәш сағында байҙарҙа батраклыҡ итә, тимер юлында эшләй. Импровизацияларын бер юлы үҙе скрипкала уйнап, йырлап башҡарған. 30-сы йылдарҙа яҙып ижад итә башлай. ”Шиғырҙар һәм йырҙар” (1939), ”Сәйет йырҙары” (1944), ”Сәсән һүҙе” (1950), ”Һайланма әҫәрҙәр” (1958), ”Сәсән йырҙары” (1964) исемле китаптары донъя күрә. Шиғырҙары нигеҙҙә коммунистар партияһына, Ленинға, Сталинға, Октябрь революцияһына, колхоз тормошона арналған. ”Нужа бабай сәйәхәте”, ”Нужаның яңы сәйәхәте”, ”Нужа ҡарттың улы Ҡоробай хаҡында”, ”Бәхет-ҡыҙ тураһында һүҙ” кеүек шиғри әкиәттәрендә халыҡтың революцияға тиклемге ауыр үткәне менән ”бәхетле” совет осоро ҡаршы ҡуйыла. Ҡайһы бер шиғырҙары һәм мәҫәлдәре балаларға тәғәйенләнә. Дөйөм билдәле мәғлүмәттәргә таянып яҙылған ”Салауат батыр” әҫәре ”ҡобайыр” тип аталған. Сәйет Исмәғилевтың баҫылған әҫәрҙәре араһында ”әйтеш” тигәне лә бар. 1939 йылда Фәррәх Дәүләтшин менән әйтешендә йәш совет республикаһына, ”алтын менән яҙылған, көмөш менән тегелгән” Сталин конституцияһына, ҡулдарға тотоношоп, ”оҙон-оҙон юлдарҙан” килгән ун алты егеткә — илдең ун алты союздаш республикаһына дан йырлайҙар (Башҡорт халыҡ ижады. Өс томда. III том: Совет осоро. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1955. — 217—220-се биттәр).

## Мөхәмәтша Буранғолов
(1888—1966)

Совет осоро сәсәндәре араһында Мөхәмәтша Буранғолов (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Красногвардейский районы Үрге Ильяс ауылында тыуған) үҙенә башҡа айырылып тора. Ул, XVIII—XIX быуаттарҙың боласыл характерлы һүҙ оҫталары кеүек, ауыр, әммә ҙур ижад ғүмере кисергән. Бала сағынан белемгә ынтылышы бик көслө булған, быға йәшләй етем ҡалыуы ла ҡамасаулай алмаған: 1901 йылда рус земство мәктәбен, 1907 йылда атаҡлы Ҡарғалы мәҙрәсәһен тамамлай, аҙаҡ Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡый. Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы йылдарында Башҡортостандың үҙаллылығы өсөн әүҙем көрәш юлына баҫа. 20—30-сы йылдарҙа мәктәптәрҙә, махсус урта уҡыу йорттарында уҡыта. 1938—1940 йылдарҙа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1940 йылда СССР яҙыусылар Союзы ағзаһы итеп алына, тиҙҙән уға ”Башҡортостандың халыҡ сәсәне” тигән маҡтаулы исем бирелә. Әммә 40-сы йылдар урталарынан М.Буранғолов буржуаз милләтселектә нахаҡҡа ғәйепләнеп, эҙәрлекләнә башлай. Совет власы йылдарында биш тапҡыр (1918, 1920, 1929, 1937, 1950) ҡулға алына. Һуңғыһында бөтә дәрәжәләренән, наградаларынан мәхрүм ителеп, 10 йылға Себергә оҙатыла. 1956 йылда аҡланып, Башҡортостанға әйләнеп ҡайтҡандан һуң да уға бик оҙаҡ ғәҙеллек эҙләргә тура килә. Ни

бары 1959 йылда ғына Н.С.Хрущевтың шәхси ярҙамы менән маҡтаулы исеме кире ҡайтарыла, бөтә ”ғәйептәре” алына.

Фольклор һәм ауыҙ-тел ҡомартҡыларын йыйыу менән М.Буранғолов мәҙрәсәлә уҡыған йылдарында уҡ шөғөлләнә башлай. Үҙ ғүмере эсендә бөтә Башҡортостанды, күрше өлкәләрҙе йөрөп сыға, башҡорт эпостарының бөтә төп репертуарын, XIV—XIX быуаттар сәсәндәренең импровизацияларын, халыҡ ижадының төп жанрҙарына ҡараған күп һандағы текстарҙы яҙып ала. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләгән ваҡытында үҙе уларҙы өйрәнеү, текстологик яҡтан эшкәртеү, ғәрәп, латин яҙмаларынан рус графикаһына һалыу, баҫтырыу менән шөғөлләнә. Тап шул йылдарҙа ваҡытлы матбуғатта ”Аҡбуҙат”, ”Иҙеүкәй менән Мораҙым”, ”Юлай менән Салауат” эпостары донъя күрә, ”Башҡорт тарихи йырҙары”, ”Башҡорт туй йолалары” йыйынтыҡтары, ”Башҡорт халыҡ поэзияһы” тигән монографияһы әҙерләнә, 1943 йылда ”Батырҙар тураһында эпос” исемле китабы баҫыла.

Сәсән-импровизатор булараҡ, М.Буранғолов үҙенең ”Ватан һуғышы” тип исемләнгән ҙур күләмле эпик әҫәрендә, ”Икенсе әрме”, ”Ҡаһым түрә” йырҙарының текстарын һәм легендаларын файҙаланып, 1812 йылғы ваҡиғаларға мөрәжәғәт итә. ”Юлай менән Салауат”, ”Ҡараһаҡал” эпостарын баҫмаға әҙерләй, өҫтәлмәләр, үҙгәрештәр индерә. Икенсе төрлө әйткәндә, сәсән был ҡомартҡыларҙың тулы хоҡуҡлы авторҙашы булараҡ сығыш яһай.

Күрәһегеҙ, яңы шарттарҙа М.Буранғоловтың эшмәкәрлеге профессиональ сәсәндәрҙең киң ҡоласлы традицион ижад ҡалыптарына ла һыйып бөтмәй. Уның үҙ импровизациялары XX быуаттың ауыҙ-тел ижадсыларында күҙәтелгән үтә бер ҡатлылыҡтан, идеологик ҡыҫымдан азат, XIV—XIX быуаттарҙың мәшһүр һүҙ оҫталары күтәргән проблемаларға ауаздаш. Өҫтәүенә, М.Буранғолов яҙма әҙәбиәт ҡанундарын өйрәнсектәрсә түгел, ә етди үҙләштерә: күренекле драматург булып танылa, проза өлкәһендә ҡәләмен профессионалдарса һынап ҡарай. Фольклор-этнографик йүнәлешле сәхнә әҫәрҙәренең нигеҙен героик һәм социаль-көнкүреш йөкмәткеле эпостар, йырҙар һәм уларҙың легендалары тәшкил итә. 20—30-сы, 80—90-сы йылдарҙа Башҡортостан театрҙарында ”Буранбай”, ”Башҡорт туйы”, ”Иҙеүкәй менән Мораҙым”, ”Шәүрәкәй” драмалары бара, 80-се йылдар аҙағында бер повесы ”Сәлимә” тигән исем аҫтында донъя күрә.

Шулай итеп, XX быуат әҙәбиәте вәкилдәренең үҙ ижадын уҡыусыға матбуғат аша еткерергә тырышыуында, яҙма әҙәбиәт жанрҙарын үҙләштереүгә ынтылыш яһауында һөҙөмтә төрлөсә булды: өйрәнсеклек кимәлендәгеһе лә, М.Буранғоловтың профессиональ юғарылыҡтағыһы ла урын алды. Әммә ауыҙ-тел әҙәбиәтенең классик дәүерендәге жанрҙарҙың күренеүе уларға кире ҡайтыу тигәнде аңлатмай. Сөнки, беренсенән, XX быуат сәсәндәре ижадына был жанрҙар бик һирәк, осраҡлы рәүештә генә килеп инде (С.Исмәғилевтың ”Салауат батыр” ҡобайыры, Фәррәх менән Сәйеттең әйтеше, М.Буранғолов авторлыҡ өлөшө индергән эпостар), икенсенән, эпостарҙы иҫәпкә алмағанда, ҡалғандары шул жанрҙарҙың тәбиғәтенә төрлө яҡлап (йөкмәтке һәм форма йәһәтенән) ярашырҙай камиллыҡтан алыҫ булды.